*Зөһрә АЛТЫНБАЕВА*

# Яҙмыштар шулай яҙыла

Тирәкле — Архангель районының иң күркәм, иң тыныс ауылдарының береһе. Тирә-яктан ҡуйы урман уратып алған, ә ҡаршы яҡта — бейек тау. Әлбиттә, бәләкәй Наилә өсөн ул иң бейек тау һымаҡ тойола. Үҫә төшкәс, ошо тау башына менеп баҫҡанда ул үҙен осоп китерҙәй хис итә ине. Эйе, ҡанаттарын ҡаға-ҡаға мөғжизәләр иленә, бөтә кеше лә бәхетле булған ергә осор ине ул...



*Наилә Ғәләүетдинова*

Бик ныҡ теләһәң, иң алыҫ хыял да тормошҡа аша, тиҙәр. Башланғыс синыфты ауылдарында тамамлаған ҡыҙҙы Өфө ҡалаһына, 1-се интернат-мәктәпкә (хәҙер — Р.Ғарипов исемендәге гимназия) уҡырға саҡыралар. Ошонда изге күңелле дуҫтарын, ихлас уҡытыусыларын таба ла инде.

Барыһына ла өлгөрә Наилә: яҡшы уҡый, төрлө мәҙәни сараларҙа ла әүҙем ҡатнаша. Интернатта уҙған кисәләрҙә оҫта итеп шиғыр һөйләй, матур итеп бейей, йырлай. Күңелендә яҡты хыялы ла төймәләнгән — уҡытыусы булырға ниәтләй ул. Әммә халыҡ юҡҡа ғына, барыһы ла Хоҙай ҡулында, тимәгәндер. Шулай, 9-сы синыфта уҡып йөрөгәндә әхирәттәре үҙҙәренең сәнғәт училищеһына имтихан тотоп ҡарарға ниәтләнеүҙәрен әйтә. Наиләне лә өгөтләп күндерәләр. Бында ла серле донъя үҙенекен итә: тиҫтәләгән ҡыҙ имтиханға әҙерләнеп килһә лә, бер Наилә генә, өс турҙы ла уңышлы үтеп, студентка булып китә. Һиҙелмәй ҙә үтә дүрт йыл. Курсташтары араһында иң йәше, иң бәләкәйе булған Наиләне барыһы ла үҙ итә. Әйткәндәй, училищела ул Нурия Ирсаева, Рифҡәт Исрафиловтар менән бергә уҡый. Остаздары ла күренекле шәхестәр: Зәйтүнә Бикбулатова, Рим Сыртланов, Шамил Рәхмәтуллин. Студент саҡ — тынғыһыҙ саҡ, бөтәһенә лә өлгөрә улар. Радио, телевидение аша тапшырыуҙарҙа ла ҡатнашырға ваҡыт табалар. Шулай, IV курста уҡып йөрөгәндә дикторҙарға конкурс иғлан ителә.

— Үҙебеҙҙе һынап ҡарайыҡ тип, Рифҡәт, Нурия, өсәүләп киттек шунда, — тип хәтерләй Наилә апай. — Беҙ Рифҡәт менән космонавттар көнөнә арналған тапшырыуҙы алып барҙыҡ. Телевидение һәм радионың ул саҡтағы директоры Ғариф Вәли улы Ғөзәйеров, радио буйынса директор урынбаҫары Ғата Шәйхетдин улы Имаев, әҙәбиәт бүлеге мөдире Яҡуп Ҡолмой минең тауышты бик оҡшатты. «Училищены тамамлағас, мотлаҡ беҙгә эшкә кил», — тип өгөтләй ҙә башланылар. Ә минең сәхнә, тамашасы күңелендә иҫтә ҡалырлыҡ образдар ижад итеү хаҡында хыялланған мәл.

Нисек кенә булмаһын, диплом алып, кемдең ҡайҙа барасағын иғлан иткәндә, Наилә абруйлы ағайҙарҙың үҙ уйҙарын тормошҡа ашырырға ынтылыуын күрә: уны, Наилә Фазылованы (ҡыҙ саҡтағы фамилияһы), радиоға диктор итеп ебәреүҙәрен һорағандар. Өфөләге театрҙарҙа урын булмаһа ла, Сибай, Салауат театрҙары йәш актерҙарҙы көтә бит. Кәйефе ҡырылған Наилә ауылға ҡайтып китә. Өйҙәренә ҡайтып инһә, әсәһе: «Балам, һине Өфөнән эҙләп саҡыралар», — тип ҡаршылай.

— Өлкәндәрҙең һүҙен йыҡмайым, эшләп ҡарармын да, оҡшамаһа, китермен, тип радиоға юлландым, — ти Наилә апай. — Был 1965 йылдың июль айында булды. Римма апай Хөсәйенова, Әлфиә апай Әхмәтова, Шамил ағай Бәширов, Ғәлимнур ағай Бикбулатов, Рәсимә Кәримова, Лира Фәйзуллина, Марат Рафиҡовтар булған дикторҙар коллективы бик ихлас ҡабул итте мине. Тиҙ арала үҙ кеше булдым да киттем.

Эйе, 19 йәше лә тулмаған Наилә бына шулай иң яғымлы тауышлы диктор булып китә. Инде дүрт тиҫтә йыл үтеп киткән, ә хеҙмәт кенәгәһендә бер генә яҙыу — радио дикторы. Телевидение экрандарында байтаҡ тапшырыуҙар алып барһа ла, үҙен радио дикторы тип иҫәпләй Наилә апай, радиоға алып килгән яҙмышына шөкөр ҡыла.



Бына нисә йылдар инде күңел йылыһы бөркөлөп торған ғәжәйеп яғымлы тауыш беҙгә хәйерле иртәләр теләй, яңылыҡтар донъяһына һәм йыр-моң иленә алып инә. Был тауышты көн һайын тыңлаһаҡ та, һәр таң менән әле тәү тапҡыр ишеткәндәй ихлас ҡабул итәбеҙ. Улай ғына ла түгел, уның тауышын ишетеп, башланған көн уңышлы, бәҫле булған төҫлө.

Әлбиттә, бала саҡтан актриса булыу хаҡында хыялланған Наиләлә һайлаған һөнәре буйынса эшләү теләге оҙаҡ һүнмәй. Ә инде Башҡорт дәүләт академия драма театрына саҡырғас, тағы ла дәртләнеп

китә. Әммә радиокомитеттың ул саҡтағы етәкселәре йәш дикторҙы ебәрмәй, яҙған ғаризаһын йыртып ташлайҙар. Әле бына тиҫтәләрсә йылдар уҙғас, шул мәлдә үҙен китмәҫкә өгөтләгән хеҙмәттәштәренә сикһеҙ рәхмәтле Наилә Ғизетдин ҡыҙы.


*Наилә Ғизетдин ҡыҙы Ғәлимнур Бикбулатов менән*

— Яратҡан эше әҙәм балаһын бәхетле, тормошон бөтөн итә, — ти Наилә апай. — Үҙеңә йөкмәтелгән эшкә яуаплы ҡараһаң, һәр төрлө һөнәр ҙә күңелгә ҡыуаныс килтерә, йәшәргә, ижад итергә дәрт бирә. Ни тиһәң дә, минең тормош юлым ошо хәҡиҡәтте раҫлай. Эшкә мин көн һайын байрамға килгән кеүек киләм.

Эйе, шулай тип әйтергә тулы хоҡуғы бар Наилә Ғизетдин ҡыҙының. Башҡортостан радиоһының иртәнге тапшырыуҙары сәғәт алтыла башлана. Ваҡытында барып етеү өсөн дикторҙарға таңғы сәғәт дүрттән дә ҡалмай уянырға кәрәк. Наилә апай өсөн иһә эшкә һуңға ҡалыу бөтөнләй ят нәмә, сөнки төп һыҙаты — яуаплылыҡ һәм теүәллек. Шулай булмаһа, радиола ла, телевидениела ла эшләп өлгөрөр инеме һуң?! Төрлө әҙәби-музыкаль композициялар, телевизор ҡараусы тамашасыларҙың һорауҙары буйынса әҙерләнгән концерттар, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән «Күңелле станциялар» һәм башҡа тапшырыуҙарҙы Наилә Ғәләүетдинова һәр саҡ күңел йылыһын, ихласлығын ҡушып алып бара. Шуға ла тамашасы уны үҙ итә, ярата.

Диктор өсөн яғымлы тауыш һәм яҡшы дикция мөһим. Шул уҡ ваҡытта һәр бер тексты халыҡ күңеленә етерлек итеп уҡып бирергә кәрәк. Яңылыҡтар булһынмы, теге йәки был кеше тураһында очеркмы, йә булмаһа концерт алып барһынмы — һәр береһенә үҙенә генә хас тауыш, интонация кәрәк.

— Диктор әҙер тексты уҡыу менән бергә, белемле, грамоталы булырға тейеш, — ти Наилә апай. — Был талаптар элек-электән килә. Тексты эфирҙа уҡыр алдынан иң элек танышып сығабыҙ. Сөнки төрлө ваҡыт була, ҡайһы берҙә ашығыс хәбәрҙәрҙе лә уҡып ишеттерергә кәрәк. Дикторҙар тағы бер мөһим сифатҡа эйә булырға тейеш — төрлө хәлдәр килеп тыуғанда, юғалып ҡалмау. Тормош бит ул, ҡапыл ут һүнгән, техника сафтан сыҡҡан мәлдәр булғылай.

Әлбиттә, дүрт тиҫтәнән ашыу йылдар дауамында Наилә апайҙың төрлө хәлдәргә осрағаны булғандыр, әммә элек үҙенең иртә менән эшкә нисек килеүен әле көлөп тә, ҡайғырып та иҫкә ала.

— Әле беҙ иртәнге тапшырыуҙарҙы сәғәт алтыла башлайбыҙ, элек етенсе яртыға килә инек, — тип хәтерләй ул. — Хәҙер рәхәт: беҙҙе иртән машина килеп ала. Элек иһә нисек тура килә, шулай килергә мәжбүр инек. Күп ваҡыт кис йоҡларға ятҡанда: иртән эшкә нисек барырмын инде, тип борсола торғайным. Трамвайҙар алтыла ғына йөрөй башлай. Улары ла төрлөсә йөрөй. Икмәк ташый, сүп түгә торған машиналарға ултырып килгән саҡтар ҙа булды. Нисек кенә булмаһын, эфирға һуңламаным.

Бына шундай тәүәккәл дә, яуаплы ла кеше ул Наилә Ғизетдин ҡыҙы. Шуға ла Башҡортостаныбыҙҙың иң яратҡан, хөрмәт иткән дикторҙарының береһе булып танылған. Өфө урамдарында осраған һәр кем уны таный, ихлас һаулыҡ һораша, сәскәләр бүләк итә.

— Мине йәштәрҙең дә таныуына ҡыуанам, — ти Наилә апай. — Шулай, бер ваҡыт иртәнге эфирҙан ҡайтып барһам, ҡаршыға сәскә гөлләмәһе тотҡан ике егет килә. Тәүҙә уҙып киткәндәй булдылар ҙа, туҡтап ҡалдылар. Береһе: «Һеҙ Наилә Ғәләүетдинова апай, эйе бит, — ти. — Беҙ бына армиянан ҡайтып киләбеҙ. Салауат Юлаев һәйкәленә китеп барабыҙ. Уға сәскәләр һалырға өлгөрөрбөҙ, ә был гөлләмә һеҙгә», — тип, сәскәләр бәйләме тоттороп киттеләр. Ошондай мәлдәрҙә үҙеңде нисек бәхетле тоймайһың инде?!

Эйе, бәхетле Наилә Ғизетдин ҡыҙы. Яратҡан эше, матур ғаиләһе булыу менән ифрат бәхетле. Шулай булмаһа, әле ейән-ейәнсәрҙәре өсөн ҡыуанып йәшәр инеме һуң. Ғүмер юлдашы Мансур ағайҙан уңды: эшенең мәшәҡәтле булыуын аңлап, һәр саҡ бер-береһенә терәк булып йәшәнеләр. Ҡыҙҙары Эльза менән Гүзәлде тәрбиәләүҙә лә уның ярҙамы ҙур булды. Ҡыҙҙары үҙҙәре лә бәләкәйҙән үҙаллы булып үҫте.

Ата-әсәһенең мәшәҡәтле һәм яуаплы эштә булыуҙарын аңлап үҫкән Гүзәл менән Эльза хәҙер үҙҙәре ғаиләле. Гүзәл атаһының юлын һай-



*Ҡыҙҙары Гүзәл һәм Эльза менән*

лаған — Өфө нефть институтын (хәҙер — университет) тамамлаған. Кесе ҡыҙҙары Эльза — педагог-логопед. Наилә апай менән Мансур ағайҙы өләсәй һәм олатай иткәндәр: Гүзәлдең улы Оскар менән ҡыҙы Диана, Эльзаның улы Данис һәм ҡыҙы Камилла иң ҡәҙерле кешеләр улар өсөн. Эшкә лә, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарашырға ла өлгөрә Наилә апай. Ул ғына ла түгел, йәйҙәрен баҡсаһында йүгереп эшләй.



— Гөлдәр үҫтерергә яратам бит мин, — ти ул. — Иртә яҙҙан һалҡын көҙгәсә баҡсабыҙҙа гөлдәр сәскә ата: розалар, гладиолустар, пиондар, астралар, ромашкалар... Йәйҙең матур, йылы көндәренә ҡыуанып, беҙҙе ҡыуандырып үҫһендәр, тим. Емеш-еләк тә ишелеп уңа.

Бына шундай тормошҡа ғашиҡ, унының ҡәҙерен белгән кеше ул Наилә Ғизетдин ҡыҙы. Күңеле тулы итәғәтлелек, ихласлыҡ. Тормош сәхнәһендә оҫта диктор, киң күңелле ҡатын, балалары өсөн һуңғы һынығын йәлләмәҫ әсә, ейән-ейәнсәрҙәре өсөн изге фәрештә булыуы менән ихтирам яулаған өләсәй.

Башҡортостандың халыҡ артисткаһы тигән абруйлы исем унының бар асылына тап килә. Үҙенең аһәңле тауышы, илһамлы һәм хисле булмышы, итәғәтлелеге, тыйнаҡлығы менән беҙҙең күңелдәрҙе әсир итә, яҡты иртәләребеҙҙе, тыныс кистәребеҙҙе биҙәй, дәрт һәм дарман өҫтәй.

Наилә апай Башҡортостан радиоһы аша йыш ҡына минең шиғырҙарҙы ла уҡый. Уны тыңлағанда әҫәрҙәргә ниндәйҙер өр-яңы тойғолар өҫтәлгәндәй, шуға ла был шиғырҙар үҙ тыңлаусыһын таба, күңелдәрҙә урын ала. Яғымлы тауыш эйәһенең уҡыусылары ла етерлек.

— Әлбиттә, диктор булыу өсөн иң элек матур тауыш кәрәк, — ти ул. — Һәр бер диктор үҙенсә, ҡабатланмаҫ шәхес булырға тейеш. Ныҡышмаллыҡ, тырышлыҡ ҡушылған осраҡта маҡсатҡа ирешергә мөмкин. Әле бына Рита Шәмсетдинова, Линария Ямалетдинова, Миләүшә Ғәлиевалар киләсәктә үҙ асылын табыр, тип ышанам.

Башҡортостан илендә таңдарҙы уятыусы Наилә Ғәләүетдинова үҙенең кешеләрҙе яратырға, мәрхәмәтле, ярҙамсыл булырға тигән тормош девизына һис кенә лә хыянат итмәй. Шуға ла үҙен ихтирам итәләр, яраталар, ышаналар. Ә халыҡ һөйөүе — бөтә наградаларҙан да ҡиммәтерәк.